# Ауыл белгестәре әҙерләнә

Дыуан ауыл хужалығы техникумы — Башҡортостандың төньяҡ-көнсығыш төбәге өсөн ауыл хужалығы белгестәре әҙерләү усағы ул. Башҡортостанда коллектив хужалыҡтар ойошторолған мәлдә, 1930 йылда асыла техникум. Сөнки берләшкән крәҫтиән хужалыҡтарын үҫтереү өсөн кадрҙар кәрәк була.

Тәүҙә техникум 1898 йылда төҙөлгән һәм әлегәсә Көньяҡ Уралдағы механика заводтары өсөн слесарь-механиктар, ағас эшкәртеүселәр әҙерләгән училище бинаһында урынлаша. Уның директоры итеп С.С.Бодров тәғәйенләнә. Техникумдың матди базаһын бер ат, бер арба, тарантас, сана тәшкил итә. Талиптар өсөн китапханала 800 китап иҫәпләнә. Бинаның беренсе ҡатында трактор ремонтлау мастерскойы булып, уға Чертаново артелендәге «Интернационал» тракторының беренсе тракторсыһы Геннадий Морозов етәкселек итә.

1932-1941 йылдарҙа техникумда директор булып М.З.Хәбибуллин эшләй һәм уның матди базаһын нығытыуға ҙур өлөш индерә.

Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында техникумдың да, уның уҡыу хужалығының да матди хәле бик насарая. Әммә дәртле, уңған директор А.Д.Угримов етәкселегендә ошо бөлгән хужалыҡ аяҡҡа баҫа: баҡса ултыртыла, йәшелсә һаҡлағыс, малсылыҡ биналары төҙөлә.

Техникумдың уҡыу хужалығының йылдам үҫеше иһә Г.Ф.Ведерников исеменә бәйле. Техникумды 1938 йылда тамамлаған Григорий Филатович үҙенең 20 йыл ғүмерен ошо хужалыҡты үҫтереүгә арнаған.

1956 йылда техникумда зоотехниктар бүлеге асыла. Был өлкәлә дөйөм зоотехния фәнен уҡытҡан Т.Н.Ярина ҙур тырышлыҡ һала. Уның ныҡышмалылығы һөҙөмтәһендә уҡыу хужалығына Симменталь һәм Бестужев тоҡомло һыйыр малдары, эре тоҡомло сусҡалар, арғымаҡ тоҡомло аттар һатып алына һәм үрсетелә. Тап ошо йылдарҙа Башҡортостандың төньяҡ-көнсығыш райондары өсөн мөһим әһәмиәткә эйә булған район-ара яһалма ҡасырыу станцияһы ойошторола.

1960-70-се йылдарҙа оҫта һәм тәжрибәле педагогик коллектив булдырыуға айырыуса ҙур иғтибар бирелә. Был йәһәттән 1961-1975 йылдарҙа техникумды етәкләгән Г.Н.Пастуховтың хеҙмәт өлөшө ҙур.

60-сы йылдар башында район үҙәге тәүҙә Үрге Ҡыйғыға, унан Мәсәғүткә күсерелә һәм бер-нисә бина бушай. Һөҙөмтәлә 1965 йылда тағы ветеринария бүлеген асыу мөмкинлеге тыуа.

80-се йылдарҙа техникумдың матди базаһын яңыртыу бурысы ҡуйыла, заманса белемдә нығытыу, һынау талап ителә.

1983 йылда «Дыуан» совхозы директоры Е.И.Трусов, ауыл хужалығы техни-



*Дәрес ваҡыты*

кумы директоры Е.С.Михляев һәм педколлектив совхоз менән техникумдың базаһын берләштереү тураһында тәкдим менән мөрәжәғәт итәләр. Шулай итеп, Дыуан совхоз-техникумы барлыҡҡа килә.

Әлеге ваҡытта техникумда көндөҙгө һәм ситтән тороп уҡыу бүлектәрендә 950-нән ашыу талип белем ала, уларҙы 37 уҡытыусы уҡыта.

Техникум асылғандан алып уны 8953 ауыл хужалығы белгесе, шул иҫәптән 3009 агроном, 1751 зоотехник, 57 зооветтехник, 72 йәшелсәсе фермер, 12 малсы-фермер, 1373 ветеринария фельдшеры, 76 механик тамамлаған. Әле Башҡортостандың бөтә райондарында ла тиерлек техникумды тамамлаған белгестәр эшләй, уларҙың күптәре данлы исемдәргә лайыҡ, ҙур уңыштарға өлгәшкән кешеләр. Башҡортостан Республиканың элекке ауыл хужалығы министры, әле Рәсәй Дәүләт Думаһы депутаты Франис Әсҡәрйән улы Сәйфуллин, Башҡортостан Республикаһының ауыл хужалығы министрлығы эргәһендәге ветеринария бүлеге етәксеһе Фәрит Вәлинур улы Шәйнуров, Дыуан районының хакимиәт башлығы Николай Петрович Штенцев, районның баш ветеринария врачы Рим Ғәрифулла улы Шәрәфетдинов һ.б. бар.

Техникумды 1948 йылда тамамлаған П.Ф.Ившин — Башҡорт АССР-ының атҡаҙанған агрономы, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән наградланған, Бөйөк Ватан һуғышы ветераны Г.Ф.Ведерников та «Башҡорт АССР-ының атҡаҙанған агрономы» исемен йөрөтә.

Шуны ла әйтергә кәрәк, техникумды тамамлаусыларҙын күбеһе һуңынан юғары уҡыу йортонда белем алды, байтағы ғилми эшкә тотондо. Әлеге ваҡытта улар араһында 11 фән кандидаты һәм фән докторҙары бар.

Техникум үҙенең спорт ҡаҙаныштары менән дә дан тота — бында 11 спорт мастеры әҙерләнгән. Хәҙерге көндә белем алыусы талиптар уларға лайыҡлы алмаш булып үҫә.